БАШҠОРТОСАН РЕСПУБЛИКАҺЫ КӨЙӨРГӘҘЕ РАЙОНЫ
МУНИЦИПАЛЬ РАЙОН ХАКИМИӘТЕНЕҢ МӘҒАРИФ БҮЛЕГЕ

«Башҡортостан Республикаһы Көйөргәҙе районы муниципаль райондың Яңы Таймаҫ ауылы Р.Солтангәрәев исемендәге гимназияһы»

**Ҡаралды**

МБ ултырышы
Протокол № 1

31 август 2023 й.

МБ ет.____________

**Килешелде**

МБ ултырышы
Протокол № 1
31 август 2023 й.
УТЭ буйынса директор урынбаҫары Байғотлина Л.Х. ________

**Раҫлайым**

Бойороҡ № 120-ОД
«1» 09 2023 й.
гимназия директоры
Әбсәләмов Р.Р.
________

# “Башҡорт теле” уҡыу предметының эш программаһы

## 10-11-се класс уҡыусылары өсөн

## 2023-2024 уҡыу йылына

Башҡарҙы:
башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Әҙеһәмова Гөлназ Флүр ҡыҙы

Яңы Таймаҫ 2023 й.

## АҢЛАТМАЛЫ ЯҘЫУ

Уҡытыу туған (башҡорт) телендә алып барылған төп дөйөм белем биреү ойошмаларының 5-9 кластары өсөн өлгө программа һәр уҡыу йылында уҡыу предметының йөкмәткеһен, уҡытыуҙың төп методик стратегияһын, «Туған (башҡорт) теле)» уҡыу предметы саралары ярҙамында уҡыусыларҙы тәрбиәләү һәм үҫтереүен билдәләй.

Программаның норматив-хоҡуҡи нигеҙләнеше:

- Рәсәй Федерацияһының конституцияһы;
- Федеральный закон от 29 декабря 2012 г. № 273-ФЗ «Об образовании в Российской Федерации» (с изменениями и дополнениями);
- « Рәсәй Федерацияһының мәғариф тураһындағы законы» (29.12.2012. №273-ФЗ) (үҙгәрештәр һәм өҫтәмәләр менән);
- «Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы (25.10.1991. № 1807-1 ФЗ) (үҙгәрештәр һәм өҫтәмәләр менән);
- «Төп дөйөм белем биреү Федераль дәүләт белем биреү стандарттары» (31. 05.2021 й. № 287);
- Төп дөйөм белем биреүҙең өлгө төп дөйөм белем биреү программаһы (18.03.2022. № 1/22дөйөм белем биреү буйынса федераль уҡыу-уҡытыу берекмәһе ҡарары менән раҫланған);
- Өлгө тәрбиәүи программа (02.06.2020. № 2/20 дөйөм белем биреү буйынса федераль уҡыу-уҡытыу берекмәһе ҡарары менән раҫланған);
- «Рәсәй Федерацияһы халыҡтарының туған телдәрен уҡытыу Концепцияһы» (2019 йылдың 1 октябрендә Рәсәй Федерацияһының Мәғариф Министрлығы коллегияһы ултырышында раҫланған);
- Башҡортостан Республикаһының конституцияһы;
- Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһындағы» Законы (үҙгәрештәр һәм өҫтәмәләр менән);
- 2021 – 2030 йылдарҙа «Башҡортостан Республикаһының дәүләт телдәрен һәм Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының туған телдәрен уҡытыу Концепцияһы» (30 декабрь Башҡортостан Республикаһы Башлығы 2020 йылда № УГ-613 Ҡарары менән раҫланған);
- 2021 – 2030 йылдарҙа «Башҡортостан Республикаһының дәүләт телдәрен һәм Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының туған телдәрен уҡытыу Концепцияһы» (30 декабрь Башҡортостан Республикаһы Башлығы 2020 йылда № УГ-613 Ҡарары менән раҫланған)

Башҡортостан Республикаһы һәм Рәсәй Федерацияһының башҡа регионлдарында башҡорт телендә уҡытыу йә туған (башҡорт) телен өйрәнеү дөйөм белем биреү ойошмаларында эшләүсе башҡорт теле уҡытыусыларына уҡыу предметынан мәктәптә белем биреүҙең хәҙерге тенденцияларына һәм уҡытыуҙың актив методикаһына йүнәлдерелгән эш программаһы төҙөүҙә методик ярҙам күрһәтеү йәһәтенән төҙөлдө.

Программаның йөкмәткеһе системалы-эшмәкәрлекле йүнәлеш менән ярашлы төҙөлгән һәм «Туған тел һәм туған әҙәбиәт» уҡыу предметына төп дөйөм белем биреү федераль дәүләт белем биреү стандарттарының төп дөйөм белем биреү программаһының өлгәшелгән һөҙөмтәләрен үҙләштереү өлөшөнә йүнәлдерелгән.

Дәреслектәр һәм эш программа төҙөүсе авторҙар уҡыу материалының күләмен һәм йөкмәткеһен киңәйтергә, уҡыусыларҙың үҙешенә һәм тәрбиәләүгә булышлыҡ итеүсе эш төрҙәре тәкдим итергә хоҡуҡлы.

## «ТУҒАН (БАШҠОРТ ТЕЛЕ)» УҠЫУ ПРЕДМЕТЫНА ДӨЙӨМ ХАРАКТЕРИСТИКА

Башҡорт теле – башҡорт халҡының туған теле, Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле.

Туған тел башҡорт мәҙәниәте һәм әҙәбиәтенең рухи байлығына ылыҡтырыу сараһы булып хеҙмәт итә, шәхесте социалләштереүҙең төп каналы һәм уны кешелектең рухи-тарихи тәжрибәһенә ылыҡтырыу.

Төрлө белемдәрҙе үҙләштереү һәм һаҡлау формаһы булараҡ, башҡорт теле башҡа предметтар менән тығыҙ бәйләнгән, уларҙы үҙләштереүгә, ә һуңынан - профессиональ күнекмәләрҙе үҙләштереү сифатына тәьҫир итә. Аралаша белеү, аралашыу процесында уңыштарға өлгәшеү, юғары социаль һәм профессиональ активлыҡ шәхесте характеристикалау булып тора, тормоштоң бөтә өлкәләрендә кеше уңыштарын билдәләй, хәҙерге үҙгәреүсән донъя шарттарында уның социаль яраҡлашыуына булышлыҡ итә.

Төрлө тормош ситуацияһында баланың тәртибендә этик нормаларҙы формалаштырыуҙа туған тел нигеҙ булып тора.

Мәктәптә башҡорт теленә өйрәнеү уҡыусының әхлаҡи һәм коммуникатив мәҙәниәтен камиллаштырыуға йүнәлдерелгән, уның интеллектуаль һәм ижади һәләттәрен, фекер йөрөтөү, хәтер һәм күҙ алдына килтереүен, үҙаллы уҡыу эшмәкәрлеге күнекмәләрен, үҙ алдына уҡыуын үҫтереү.

Уҡыу предметының йөкмәткеһе кластан тыш уҡыу эшмәкәрлегендә (викторина, конкурс, экскурсияларҙа һәм башҡа сараларҙа) тормошҡа ашырырға мөмкин.

## «ТУҒАН (БАШҠОРТ ТЕЛЕ)» УҠЫУ ПРЕДМЕТЫН ӨЙРӘНЕҮҘЕҢ МАҠСАТЫ ҺӘМ БУРЫСТАРЫ

«Туған (башҡорт) теле» уҡыу предметын өйрәнеүҙең **маҡсаты** – телмәр эшмәкәрлегенең төрҙәрен, туған телдәге коммуникатив күнекмәләрҙе һәм телмәр мәҙәниәтен камиллаштырыу, башҡорт теленең үҙенсәлектәре, тел тураһындағы фәндең бүлектәре менән тап килеүсе төп тел берәмектәре тураһында белемдәрҙе киңәйтеү.

«Туған (башҡорт) теле» уҡыу предметын өйрәнеүҙең **бурыстары:**

— дөйөм Рәсәй ҡиммәте, сағылдырыу формаһы һәм башҡорт, Башҡортостан Республикаһының башҡа халыҡтарына рухи байлығын һаҡлаусы, кешенең төрлө сфералағы эшмәкәрлегендә аралашыу һәм белем алыу сараһы булараҡ башҡорт теленә ҡарата аңлы мөнәсәбәт тәрбиәләү,

— дөйөм Рәсәй һәм башҡорт мәҙәниәтенә, Рәсәй Федерацияһының барлыҡ халыҡтарҙың мәҙәниәтенә һәм теленә ҡарата ихтирам тәрбиәләү;

— шәхсән үҫеш инструменты һәм төрлө мәғлүмәтте ҡабул итеү, шул иҫәптән төрлө уҡыу предметтарынан белем алыу сараһы булараҡ башҡорт телен үҙләштереү;

— башҡорт теле тураһында белемдәрҙе, уның төҙөлөшө һәм үҫеш ҡанундары, башҡорт теленең стилистик ресурстары тураһында белемдәрҙе үҙләштереү; башҡорт әҙәби теле нормалары һәм телмәр этикеты нормаларын практик үҙләштереү;

— актив һәм потенциаль һүҙлек запасын байытыу һәм төрлө грамматик сараларҙы үҙ телмәр практикаһында ҡулланыу;

— орфографик һәм пунктуацион грамоталыҡты камиллаштырыу; телмәреңде камиллаштырыуға ынтылыуҙы тәрбиәләү;

— телмәр эшмәкәрлеген, шәхес- ара һәм мәҙәниәт- ара формаль һәм формаль булмаған шарттарҙа кешеләр менән эффектив аралашыуҙы тәьмин итеүсе коммуникатив күнекмәләрҙе камиллаштырыу;

— башҡорт телен өйрәнеү процесында фекер йөрөтөү эшмәкәрлеген универсаль интеллектуаль сағыштырыу, анализ, синтез, абстрактлашыу, дөйөмләштереү, классификациялауҙы камиллаштырыу, билдәле законлылыҡ һәм ҡағиҙәне булдырыу;

— функциональ грамоталыҡты үҫтереү: мәғлүмәти эҙләнеү күнекмәләрен тормошҡа ашырыу, кәрәкле мәғлүмәтте алыу һәм эшкәртеү, интерпретация биреү һәм төрлө форматтағы текстарҙы (тотош, тотош булмаған текст һәм б.) аңлау һәм ҡулланыу;

— стратегик һәм тактик мәғлүмәти-мәғәнәүи тексты эшкәртеүҙе, тексты аңлау, уның билдәләнешен, дөйөм мәғәнәһен, авторҙың коммуникатив ниәттәрен, логик

структураһын, тел сараларының ролен үҙләштереү.

**“Туған (башҡорт) тел” предметын өйрәнеү һөҙөмтәләре**

“Туған (башҡорт) тел” программаһын үҙләштереүҙең **шәхси** һөҙөмтәләре булып түбәндәгеләр тора:

1) башҡорт телен башҡорт халҡының төп милли-мәҙәни ҡиммәте булараҡ аңлау, интеллектуаль, ижади һәләтлектәрен һәм шәхестең мораль-этик сифаттарын үҫтереүҙә туған телдең ролен, уның мәктәптә белем алыу процесындағы әһәмиәтен билдәләү;

2) башҡорт теленең эстетик ҡиммәтен аңлау; туған телгә ҡарата ихтирам, һөйөү, уның менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү; милли-мәҙәни сағылыш булараҡ, башҡорт теленең таҙалығын һаҡлау тураһында хәстәрлек күреү; үҙ телмәреңде камиллаштырыуға ынтылыу;

3) аралашыу процесында кәрәкле һүҙлек запасына эйә булыу һәм үҙ фекереңде иркен еткереү әсән тейешле грамматик сараларҙы үҙләштереү; үҙ телмәреңде күҙәтеү һәм уны баһалау күнекмәһен булдырыу.

“Туған (башҡорт) тел” программаһын үҙләштереүҙең **метапредмет һөҙөмтәләре:**

1) телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен үҙләштереү:

-телдән һәм яҙма бирелгән мәғлүмәтте адекват ҡабул итеү;

-уҡыуҙың төрлө төрҙәрен үҙләштереү;

-төрлө сығанаҡтарҙан, шул иҫәптән ваҡытлы матбуғат сараларынан, уҡыу ҡулланмаһы булараҡ компакт-дискыларҙан, интернет ресурстарҙан мәғлүмәтте һайлап алыу һәләтлелеге;

-һайлап алыу алымдары менән эш итә белеү һәм тәғәйен темаға материалды системаға килтереү; уҡыу йә аудирование һөҙөмтәһендә, шулай уҡ техник саралар һәм мәғлүмәти технологиялар ярҙамында мәғлүмәтте үҙ аллы эҙләй ала белеү, уны анализлау һәм һайлап алыу; ҡайтанан эшкәртеү, һаҡлай һәм еткерә белеү;

-алдағы уҡыу эшмәкәрлегенең (индивидуаль һәм коллектив) маҡсатын билдәләү һәләтлелеге, эштең эҙмә-эҙлелеге, өлгәшелгән һөҙөмтәләрҙе баһалау, уларҙы телдән һәм яҙма формала адекват аныҡ итеп әйтеү;

-телдән һәм яҙма формала үҙ фекереңде иркен еткерә белеү; тыңланған йәки уҡылған тексты тәҡдим ителгән кимлдә (план, һөйләү, конспект, аннотация) һөйләй алыу;

- үҙ тиңдәштәрең аудиторияһында ҙур булмаған доклад, хәбәрҙәр менән сығыш яһай белеү;

2) алынған белем һәм күнекмәләрҙе көндәлек тормошта ҡуллана белеү; туған телде башҡа төрлө фәндәрҙән белем алыу сығанағы булараҡ файҙаланыу; тел күренештәрен анализлау буйынса алған белем һәм күнекмәләрен предмет-ара (сит тел, әҙәбиәт һ. б. дәрестәрҙә) ҡулланыу;

3) аралашыу процесында тирә-яҡтағы кешеләр менән коммуникатив маҡсатлы бәйләнештә, ниндәйҙер эш төрөн бергә башҡарыу, бәхәс, фекер алышыуҙа ҡатнашыу;

формаль һәм формаль булмаған шәхестәр менән мәҙәни-ара аралашыу барышындағы төрлө ситуацияларҙа телмәр этикетының милли-мәҙәни нормаларын үҙләштереү.

**Предмет һөҙөмтәләре:**

1) башҡорт теленең башҡорт халҡының милли теле, Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булыуы тураһында, тел һәм халыҡ мәҙәниәтенең бәйләнештәре тураһында, туған телдең кеше һәм йәмғиәт тормошондағы роле тураһында ҡараш булдырыу;

2) шәхестең интеллектуаль һәм ижади һәләтен үҫтереүҙә, белем алыуҙа, шулай уҡ үҙ-үҙеңде камиллаштырыу процесында башҡорт теленең билдәле ролен аңлау;

3) телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен үҙләштереү:

Аудирование (тыңлау) һәм уҡыу:

-телдән һәм яҙма бирелгән мәғлүмәтте (маҡсат, тексттың темаһы, төп һәм өҫтәмә мәғлүмәт) адекват ҡабул итеү;

-төрлөсә уҡыу күнекмәләрен булдырыу (эҙләнеү, ҡарап сығыу, танышыу, өйрәнеү); төрлө стилдәге, жанрҙағы текстарҙы үҙләштереү;

-уҡылған текстағы (план, тезис) мәғлүмәтте ҡайтанан эшкәртеү күнекмәләрен; төрлө стилдәге, жанрҙағы текстарҙы үҙләштереү;

-төрлө типтағы һүҙлектәр, белешмә өсөн әҙәбиәт, шулай уҡ электрон ҡулланмалар менән иркен ҡулланыу;

-төрлө стилдәге һәм жанрҙағы текстарҙы телдән адекват ҡабул итеү; аудированиеның (аудиотексты тулыһынса аңлау, уның төп йөкмәткеһен аңлау, мәғлүмәтте һайлап алыу) төрлө төрҙәрен үҙләштереү;

-стилистик үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, йөкмәткенән һәм ҡулланылған тел сараларынан сығып, фекерҙе сағыштыра алыу;

һөйләү һәм яҙыу:

-тыңланған һәм уҡылған тексты телдән һәм яҙма формала тәҡдим ителгән кимәлдә (йөкмәткеһен һөйләү, план, конспект) һөйләй алыу;

-телдән һәм яҙма формала үҙ фекереңде дөрөҫ һәм иркен еткерә алыу, тексты логик яҡтан эҙмә-эҙлекле төҙөү нормаларын һаҡлау; фактарға һәм үҙеңде уратып алған ысынбарлыҡ күренештәренә, уҡыған һәм ишеткәндәргә үҙ мөнәсәбәтеңде адекват сағылдырыу;

-төрлө телмәр стилендә һәм төрлә жанрҙарҙа (аралашыу ситуацияһына ҡарап) телдән һәм яҙма текст төҙөй белеү; төрлө телмәр стилендә һәм төрлө жанрҙарҙа (хикәйә, хат, ғариза, баһалама, ышаныс ҡағыҙы, расписка) яҙа белеү, аралашыу бурыстарынан сығып, тел һүрәтләү сараларын ирекле рәүештә һайлау;

-төрлө төрҙәге монолог һәм диалогты үҙләштереү; ҙур булмаған хәбәрҙәр, докладтар менән үҙ тиҫтерҙәрең алдында сығыш яһау;

-ғәмәлдә төрлө телмәрҙәге аралашыуҙың орфоэпик, лексик, грамматик, хәҙерге башҡорт теленең стилистик нормаларын һәм әҙма телмәрҙә төп орфографик һәм

пунктуационнормаларҙы һаҡлау; лексика һәм фразеологияны стилистик яҡтан корректлы ҡулланыу; яҙыуҙа орфография, пунктуацияның төп ҡағиҙәләрен һаҡлау;

-телмәр этикеты нормаларын һаҡлап аралаша алыу, аралашыуҙың төрлө тормош ситуацияларында ым-ишара, мимиканы урынлы ҡулланыу;

-уҡыу процесында һәм көндәлек аралашыуҙа үҙ телмәреңде контролдә тота алыу; йөкмәткенән, һүҙҙәрҙе урынлы ҡулланыуҙан сығып, үҙ телмәреңде баһалай белеү; грамматика һәм телмәр хаталарын таба, уларҙы төҙәтә алыу; үҙ тексыңды мөхәррирләү һәм камиллаштыра белеү;

4) туған тел тураһында төп фәнни нигеҙҙе үҙләштереү; уның кимәл һәм берәмектәр бәйләнешен аңлау;

5) тел ғилеменең төп аңлатмалары: лингвистиканың һәм уның төп бүлектәре: тел һәм телмәр, телмәр аралашыуы, һөйләү һәм яҙма телмәр, монолог, диалог һәм уларҙың төрҙәре; аралашыу ситуациялары, фәнни, публицистик, рәсми йәки эш ҡағыҙҙары стилдәре, матур әҙәбиәт теле; функциональ-мәғәнәүи телмәр төрҙәре (хикәйәләү, һүрәтләү, фекер йөрөтөү); текст төрҙәре; телдең төп берәмектәре, уларҙың билдәләре һәм телмәрҙә ҡулланыу үҙенсәлектәрен үҙләштереү;

6) һүҙгә төрлө анализ төрҙәрен (фонетик, морфематик, һүҙьяһалыш, лексик, морфологик), һөйләм һәм һүҙбәйләнешкә синтаксик анализ: йөкмәтке, төп билдә һәм структура, тел һүрәтләү сараларын ҡулланыуҙы иҫәпкә алып, тексты анализлау.

## Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе
## 10 класс

***Тел һәм телмәр.*** Тел һәм уның вазифаһы. Донъя телдәре картинаһы. Телдәрҙең күп төрлөлөгө. Башҡорт теленең ҡәрҙәш телдәр араһындағы урыны. Телдең берәмектәре. Тел һәм телмәр төшөнсәләре. Әҙәби тел.
***Лексика.*** Лексика – телдең һүҙҙәр йыйылмаһы. Һүҙ һәм уның мәғәнәһе. Һүҙәрҙең күп мәғәнәлеге. Омонимдар. Синонимдар.Килеп сығышы яғынан башҡорт теленең лексикаһы. Башҡорт теле лексикаһында актив һәм пассив ҡулланылыусы һүҙҙәр. Һүҙҙәрҙең стилистик ҡатламдары.
***Фразеология.*** Фразеология тураһында дөйөм төшөнсә. Фразеологик берәмектәрҙең төп билдәләре. Уларҙың телмәрҙә ҡулланылышы.
***Фонетика һәм орфоэпия.*** Фонетика тураһында үткәндәрҙе иҫкә төшөрөү. Телмәрҙең фразаларға бүленеше. Интонация. Ижек. Баҫым. Өндәр.Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр. Орфоэпия һәм уның бурысы.
***Графика һәм орфография.*** Яҙыу төрҙәре һәм уларҙың тарихы. Алфавит һәм графика тураһында төшөнсә. Башҡорт яҙыуы тарихы. Орфография тураһында төшөнсә. Башҡорт телендәге орфографик нормалар.
***Һүҙьяһалыш.*** Һүҙьяһалыштың предметы. Морфема һәм уның төрҙәре. Һүҙьяһалыш ысулдары.
***Грамматика.*** Морфология. Грамматик мәғәнә, грамматик категория, грамматик формалар.Һүҙ төркөмдәре. Үҙ аллы һәм ярҙамсыһүҙ төркөмдәре.
***Исем.*** Уның телмәрҙә ҡулланылышы. Исемдәрҙең лексик-грамматик разрядтары. Исемдәрҙең һан категорияһы. Исемдәрҙең эйәлек категорияһы. Хәбәрлек категорияһы. Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше.
***Сифат.*** Уның телмәрҙә ҡулланылышы. Сифаттың лексик-грамматик мәғәнәһе. Төп һәм шартлы сифаттар. Сифат дәрәжәләре.
***Һан.*** Уның телмәрҙә ҡулланылышы. Һандың лексик-грамматик мәғәнәһе. Һандарҙың төркөмсәләре. Һандарҙың дөрөҫ яҙылышы.

***Алмаш.*** Уның телмәрҙә ҡулланылышы. Алмаштың лексик-грамматик мәғәнәһе. Алмаш төркөмсәләре.Һөйләмдәге функциялары.
***Ҡылым.*** Уның телмәрҙә ҡулланылышы. Ҡылымдың лексик-семантик төркөмдәре. Үҙ аллы һәм ярҙамсы ҡылымдар. Күсемле һәм күсемһеҙ ҡылымдар. Ҡылымдарҙың грамматик категориялары.Һөйкәлеш категорияһы. Йүнәлеш категорияһы.Ҡылым күләмдәре. Ҡылым рәүешлеге.

## 11 класс

***Рәүеш.*** Уларҙың мәғәнәһе һәм грамматик үҙенсәлектәре. Рәүештәрҙең һөйләмдәге вазифалары. Рәүештәрҙе мәғәнәләре яғынан төркөмләү. Рәүеш дәрәжәләре. Рәүештәрҙең төҙөлөшө буйынса бүленеше. Рәүештәрҙең стилистикаһы.
***Ярҙамсы һүҙҙәр.*** Уларҙың телмәрҙә ҡулланылышы. Бәйләүестәр. Уларҙың төрҙәре. Теркәүестәр. Уларҙың һөйләмдәге вазифаһы. Теркәүестәрҙең бүленеше. Киҫәксәләр. Мәғәнә биҙәктәре буйынса киҫәксәләрҙең бүленеше.
***Модаль һүҙҙәр.*** Уларҙың телмәрҙә ҡулланылышы. Модаль һүҙҙәрҙең вазифалары һәм асылы. Уларҙың разрядтары.
***Ымлыҡтар.*** Уларҙың телмәрҙә ҡулланылышы. Ымлыҡтарҙың мәғәнәләре һәм вазифалары, морфологик һәм фонетик төҙөлөшө. Оҡшатыу һүҙҙәре. Уларҙың телмәрҙә ҡулланылышы. Саҡырыу һүҙҙәре, уларҙың ҡулланылышы, мәғәнәләре һәм вазифалары.
***Синтаксис.*** Уларҙың телмәрҙә ҡулланылышы. Синтаксистың предметы. Синтаксистың берәмектәре. Һүҙбәйләнеш. Синтагма.
***Һөйләм.*** Уның телмәрҙәге урыны. Ике составлы һөйләмдәр. Һөйләмдең баш киҫәктәре. Һөйләмдә һүҙ тәртибе. Хәбәр итеү, һорау, өндәү һәм бойороҡ һөйләмдәр. Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре.
***Тиң киҫәктәр.*** Уларҙың телмәрҙә ҡулланылышы. Тиң киҫәктәрҙе үҙ-ара теркәүсе саралар. Тиң киҫәктәрҙең стилистик мөмкинлектәре.
***Айырымланган эйәрсән киҫәктәр.*** Уларҙың стилистик әһәмиәте. Айырымланған эйәрсән киҫәктәр тураһында ҡабатлау. Аныҡланыусыларҙың айырымланыуы. Өҫтәлмәлектәрҙең айырымланыуы. Хәлдәрҙең айырымланыуы.
***Бер составлы һөйләмдәр.*** Уларҙың телмәрҙә ҡулланылышы. Бер составлы һөйләмдәрҙең төрҙәре. Бер составлы һөйләмдәрҙең стилистик мөмкинлектәре.
***Тулы һәм кәм һөйләмдәр.*** Уларҙың телмәрҙә ҡулланылышы. Кәм һөйләмдәрҙең бер составлы һөйләмдәрҙән айырмаһы. Телмәрҙәге стилистик роле.
***Һөйләм киҫәктәр менән грамматик бәйләнеш булмаган һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр.*** Өндәш һүҙ һәм уның дөйөм асылы. Инеш һүҙ. Инеш һөйләмдәр.
***Ҡушма һөйләм.*** Уларҙың телмәрҙә ҡулланылышы. Теҙмә ҡушма һөйләмдәр. Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәр. Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәр.
***Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр.*** Уларҙың телмәрҙә ҡулланылышы. Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙең төҙөлөшө, эйәрсән һөйләмдең урыны. Эйәрсән һөйләмдең баш һөйләмгә бәйләнеп килеү ысулдары.
***Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр.*** Уларҙың телмәрҙәге урыны. Күп ябай һөйләмле теҙмә ҡушма һөйләм, уның төрҙәре. Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләм. Ҡатнаш ҡушма һөйләм һәм уның төҙөлөшө яғынан төрлөлөгө. Теҙемдәр һәм уларҙың төрҙәре.
***Тура телмәр менән ситләтелгән телмәр. Тект синтаксисы.*** Дөйөм мәғлүмәт. Макротекст һәм микротекст. Тектың композицияһы.

Ҡушымта

Уҡыу-уҡытыу – методик һәм мәғлүмәти-ресурс тәьмин итеү


1. Илмөхәмәтов Ә.Ғ. Хәҙерге заман дәрестәрен проектлау. – Өфө:БР МҮИ, 2015. – 54

2. Сафина Л. Х, Латыпова Р. М., Санъяров Ф. Б.Башҡорт теле. Яңы ҡараш. – Өфө: Мир печати, 2021. – 94 б.

Һүҙлектәр:

3. Аҙнағолов Р. Ғ.Башҡорт теленең орфографик һүҙлеге. – Өфө: Китап, 1998. – 368 б.

4. Әхтәмов М. Х. Грамматик һүҙлек. – Өфө: Китап, 2007. −176 б.

5. Әхтәмов М. Х. Халыҡ һынамыштары:Һүҙлек. – Өфө: Китап, 2002. − 160 б.

6. Әхтәмов М. Х. Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре һүҙлеге. – Өфө: Китап, 2008. – 776 б.

7. Әхтәмов М. Х. Омонимдар һүҙлеге. – Өөф: Китап: 2006. – 384 б.

8. Сәмситова Л. Х. Р.Башҡорт мәҙәниәтенең реалияһы: башҡорт теленең эквивалентһыҙ лексикаһы һүҙлеге– Өфө: Китап, 2006. – 214 б.

9. Урағсин З. Ғ. Русса – башҡортса һүҙлек. –Өфө: Китап, 2007. – 278 б.

10. Ураҡсин З. Ғ.Башҡорт теленең синонимдар һүҙлеге. – Өфө: Китап, 2008. –163 б.

11. Ураҡсин З. Ғ. Башҡорт теленең фразеологизмдар һүҙлеге. – Өфө: Китап, 1996. – 163

12. Усманова М. Ғ., Сәйәхова Л. Г. Башҡортса-русса һәм русса-башҡортса һүҙлек.Телмәр өлгөләре. Грамматика. – Өфө: «Эдвис», 2018. – 376 б.

13. Хисамитдинова Ф. Г. и др. Академический словарь башкирского языкаБашҡорт теленең академик һүҙлеге (ун томда). – 5 том. – Өфө: Китап, 2014. – 944 б.

Методик кәңәштәр:

14. Ғәбитова З. М. Уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 5-11 кластары өсөн “Башҡорт теле” предметы буйынса белем биреү өлгө программалары – Өфө: Китап, 2016. –70 б.

15. Интернетта Рәсәй халыҡтарының телдәре// URL: http://www.peoples,org.ru (мөрәжәғәт итеү: 14.02.2022).

16. Ғәбитова З. М, Солтанбаева Х.В., Аҙнабаев Ә.М., Таһирова С.А., Сәмситова Л.Х., Рәхимова Э.Ф., Псәнчин В.Ш., Псәнчин Ю.В., һ.б. Уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 5-11 кластары өсөн. «Башҡорт теле» дәреслегенә методик ҡулланма. – Өфө: Китап, 2016. – 535 б.

17. Ғәбитова З. М. Башҡорт теле дәрестәрендә универсаль уҡыу эшмәкәрлеген формалаштырыу. – Өфө: ИРО РБ, 2013. – 36 б.

18. Ғәбитова З. М. и др.Эш программалары төҙөү буйынса методик кәңәштәр. – Өфө, ИРО РБ, 2015. – 52 б.

Мәғлүмәти ресурстар:

19. Педагог – эҙләнеүсе сайтында уҡытыуҙа авторлыҡ методикаһы // URL: http://si-sv.com/dir/pedsovet_org/2-1-0-41 (мөрәжәғәт итеү: 22.02.2022).

20. Башҡорт энциклопедияһы // URL: http:www.bashenc.ru (мөрәжәғәт итеү: 12.01.2022).

21. Башҡорт әкиәттәре // URL: http:www.hobobo.ru/catalog (мөрәжәғәт итеү: 13.02.2022).

22. Интерактив башҡорт теле // URL: https://bashlang.ru (мөрәжәғәт итеү: 21.01.2022).

23. Мәктәптә информатика һәм ИКТ. Дәрестә компьютер // URL: http://www.iteach.ru (мөрәжәғәт итеү: 16.12. 2021).

24. Китап һәм балалар// URL: http://www.juja.ru (мөрәжәғәт итеү: 08.03.2022).

25. Ололар һәм балалар өсөн әҙәби журнал. Барыһы ла ғаилә, уҡыусы, абитуриент өсөн // URL: http://www.bibliogid.ru (мөрәжәғәт итеү: 11.02.2022).

26. Башҡортостандың мәҙәни донъяһы // URL: http:ebook.bashnl.ru (мөрәжәғәт итеү: 12.01.2022).

27. Мультимедиялы әкиәттәр // URL: https://kssovushka.ru/zhurnal/10/ (мөрәжәғәт итеү: 11.01.2022).

28. Донъя халыҡтары – сәйәси этнографик белешмә// URL: http://nation.geoman.ru (мөрәжәғәт итеү: 10.03.2022).

29. Уҡыу-уҡытыуҙа информацион-коммуникацион технологияларҙың роле // URL: http://ido.tsu.ru (мөрәжәғәт итеү: 22.10.2021).

**10-сы класс**

| № | План. дата | Факт. дата | Бүлек, тема |
|---|---|---|---|
| 1 | | | Хәүефһеҙлек дәресе. Тел һәм уның вазифаһы. Башҡорт теленең функциональ үҫеше |
| 2 | | | Донъя телдәре. Башҡорт теле ҡәрҙәш телдәр араһында |
| 3 | | | Үле һәм тере телдәр. Тәбиғи һәм яһалма телдәр. |
| 4 | | | Тел төҙөлөшө һәм тел тураһында фән бүлектәре |
| 5 | | | Тел һәм телмәр. Әҙәби тел- нормаға һалынған тел. Телмәр мәҙәниәте |
| 6 | | | Диктант. |
| 7 | | | Дөрөҫ әйтелеш нормалары. Һүҙ эсендәге баҫым |
| 8 | | | Лексика. Һүҙҙәрҙең күп мәғәнәлелеге |
| 9 | | | Перифраз. Эвфемизм |
| 10 | | | Омонимдар. Омофондар |
| 11 | | | Синонимдар. Антонимдар. Төп башҡорт һүҙҙәре. Үҙләштерелгән һүҙҙәр |
| 12 | | | Контроль диктант. Аҡмулла |
| 13 | | | Калькалар |
| 14 | | | Неологизмдар. Профессионализмдар. |
| 15 | | | Диалект һүҙҙәре. |
| 16 | | | Терминдар. Һүҙлектәр. Эмоциональ- экспрессив һүҙҙәр. |
| 17 | | | Фразеология |
| 18 | | | Фонетика. Орфоэпия. |
| 19 | | | Интонация. Телмәр такты |
| 20 | | | Баҫым. Ижектәр |
| 21 | | | Һуҙынҡы өндәр |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 22 | | | Редукция. Протеза |
| 23 | | | Эпентеза. Элизия |
| 24 | | | Тартынҡы өндәр |
| 25 | | | Ж.Ғ.Кейекбаев |
| 26 | | | Орфография. Орфоэпия |
| 27 | | | Графика |
| 28 | | | Контроль диктант. (Алдар тураһында) |
| 29 | | | Изложение. Хужа һәм бай |
| 30 | | | Хаталар өҫтөндә эш. Һүҙ составы һәм һүҙьяһалыш |
| 31 | | | Телдә һүҙьяһалыш ысулдары |
| 32 | | | Телдә һүҙьяһалыш ысулдары |
| 33 | | | Һүҙьяһалыш һәм стилистика |
| 34 | | | Грамматика. Морфология |
| 35 | | | Башҡорт телендә һүҙ төркөмдәре |
| 36 | | | Исем. Исемдәрҙең эйәлек һәм хәбәрлек категориялары |
| 37 | | | Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреүе |
| 38 | | | Килеш формаларын стилистик файҙаланыу мөмкинлектәре |
| 39 | | | Сифат |
| 40 | | | Һан |
| 41 | | | Тү. Бала башында бер ҡайғы, ата башында мең ҡайғы |
| 42 | | | Алмаш |
| 43 | | | Алмаштарҙың стилистик мөмкинлектәре |
| 44 | | | Ҡылым. Ҡылымдың лексик-семантик мөмкинлектәре |
| 45 | | | Күсемле, күсемһеҙ ҡылымдар |
| 46 | | | Контроль диктант. |
| 47 | | | Хаталар өҫтөндә эш. Ҡылымдарҙың грамматик категориялары. Һөйкәлеш |
| 48 | | | Үткән заман хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының стилистик мөмкинлектәре |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 49 | | | Үткән заман хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының стилистик мөмкинлектәре |
| 50 | | | Хәҙерге һәм киләсәк заман хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының стилистик мөмкинлектәре |
| 51 | | | Хәҙерге һәм киләсәк заман хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының стилистик мөмкинлектәре |
| 52 | | | Бойороҡ һөйкәлеше |
| 53 | | | Шарт һөйкәлеше |
| 54 | | | Теләк һөйкәлеше |
| 55 | | | Йүнәлеш категорияһы |
| 56 | | | Изложение. Буранбай |
| 57 | | | Хаталар өҫтөндә эш. Ҡылым төркөмсәләре. Сифат ҡылым |
| 58 | | | Хәл ҡылым |
| 59 | | | Исем ҡылым |
| 60 | | | Уртаҡ ҡылым |
| 61 | | | Ҡылым күләмдәре. Ҡылым рәүешлеге |
| 62 | | | Тү. Мәҡәлдә хикмәт булыр |
| 63 | | | Контроль диктант. Сихри моң |
| 64 | | | Хаталар өҫтөндә эш. Йыллыҡ тест эшләү |
| 65 | | | Ҡабатлау, йомғаҡлау, дөйөмләштереү |
| | | | |

**11-се класс**

| **№** | **План. дата** | **Факт. дата** | **Бүлек, тема** |
|---|---|---|---|
| 1 | | | Хәүефһеҙлек дәресе. Рәүеш. Рәүеш дәрәжәләре |
| 2 | | | Бәйләүестәр |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 3 | | | Теркәүестәр |
| 4 | | | Киҫәксәләр |
| 5 | | | Модаль һүҙҙәр |
| 6 | | | Инеш диктант. |
| 7 | | | Хаталар өҫтөндә эш. Ымлыҡтар |
| 8 | | | Оҡшатыу һүҙҙәре |
| 9 | | | Саҡырыу һүҙҙәре |
| 10 | | | Төрлө һүҙ төркөмдәренең стилистик төркөмдәре |
| 11 | | | Синтаксис |
| 12 | | | Һүҙбәйләнеш |
| 13 | | | Синтагма |
| 14 | | | Һөйләм. Ике составлы һөйләмдәр |
| 15 | | | Контроль диктант. |
| 16 | | | Хаталар өҫтөндә эш. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе |
| 17 | | | Интонация буйынса һөйләм төрҙәре |
| 18 | | | Һөйләмдең баш киҫәктәре |
| 19 | | | Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре |
| 20 | | | Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре |
| 21 | | | Һөйләмдең тиң киҫәктәре |
| 22 | | | Һөйләмдең айырымланған киҫәктәре |
| 23 | | | Бер составлы һөйләмдәр |
| 24 | | | Кәм һөйләмдәр |
| 25 | | | Өндәш һүҙ |
| 26 | | | Инеш һүҙҙәр, инеш һүҙбәйләнештәр |
| 27 | | | Инеш һөйләмдәр |
| 28 | | | Контроль диктант. |
| 29 | | | Изложение |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 30 | | | Хаталар өҫтөндә эш. Ҡабатлау |
| 31 | | | Хәүефһеҙлек дәресе. Ҡушма һөйләм |
| 32 | | | Теҙмә ҡушма һөйләмдәр |
| 33 | | | Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәр |
| 34 | | | Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәр |
| 35 | | | Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәр |
| 36 | | | Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәр |
| 37 | | | Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр |
| 38 | | | Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр |
| 39 | | | Эйә һөйләм. |
| 40 | | | Хәбәр эйәрсән һөйләм |
| 41 | | | Аныҡлаусы һөйләм. |
| 42 | | | Тултырыусы һөйләм |
| 43 | | | Хәл һөйләмдәр. Ваҡыт һөйләм. |
| 44 | | | Урын һөйләм |
| 45 | | | Контроль диктант. |
| 46 | | | Хаталар өҫтөндә эш. Рәүеш һөйләм |
| 47 | | | Сағыштырыу һөйләм |
| 48 | | | Күләм-дәрәжә һөйләм |
| 49 | | | Маҡсат һөйләм. |
| 50 | | | Сәбәп һөйләм |
| 51 | | | Шарт һөйләм. |
| 52 | | | Кире һөйләм |
| 53 | | | Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр. |
| 54 | | | Тиң эйәрсән һөйләмле ҡушма һөйләмдәр |
| 55 | | | Тиң булмаған эйәрсән һөйләмле ҡушма һөйләмдәр |
| 56 | | | Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәр |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 57 | | | Теҙемдәр |
| 58 | | | Тура телмәр |
| 59 | | | Ситләтелгән телмәр |
| 60 | | | Текст синтаксисы |
| 61 | | | Текстың бәйләнешлеге |
| 62 | | | Текстың композицияһы |
| 63 | | | Контроль диктант. |
| 64 | | | Хаталар өҫтөндә эш. Ҡабатлау |
| 65 | | | Ҡабатлау, йомғаҡлау. |
| 66 | | | |